Башҡортостан Республикаһы МР Бөрйән районы мәғариф бүлеге

*Кәрҙәштәрем, кешелектең сәңгелдәге бында – Бөрйәндә,*
*Урал илдән тарих башлана.*



# Урал

*Эпосы булған халыҡ - боронғо халыҡ.*
*Эпостар башҡорт халҡын Уралтауға*
*мәңгегә ҡаҙаҡлап ҡуйған.*

*Әхмәт Сөләймәнов*

Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры урынбаҫары
Венера Фәрит ҡыҙы Вәлиева менән әңгәмә.

**-Венера Фәрит ҡыҙы,"Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең Республика конкурсы өсөнсө йыл рәттән Бөрйән районында уҙа. Урал батырҙың тәү төйәгенә ҡайтыуына һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**
-Минең ҡарашым ыңғай.Беренсе тапҡыр был бәйгене 1996 йылда ошо уҡ яланда үткәрҙек. Был идеяны ул ваҡытта (хәҙер мәрхүмә инде ) Клара Мөхәммәт ҡыҙы Байназарова, ул ваҡыттағы район хакимиәте башлығы Ирек Фәсхетдин улы Зарипов, район мәғариф бүлеге методика кабинеты мөдире Роза Шәриф ҡыҙы Ғүмәровалар күтәреп сыҡҡайны. Ошо тәүге бәйгелә өс йөҙҙән ашыу бала ҡатнашты. Эпос, республика райондары буйлап йөрөгәндән һуң, бынан өс йыл элек кире үҙенең тәү төйәгенә әйләнеп ҡайтты. Киләсәктә лә был бәйге Бөрйән районында үтергә тейеш, тип уйлайым. Сөнки эпос ошо ерлектә тыуған. Эпоста һөйләнелгән Шүлгән мәмерйәһе, Йылҡысыҡҡан күле һәм башҡа эпосҡа ҡағылышлы тарихи урындар ошонда һаҡлана.
Һәр районың үҙ бренды бар. Шулай булғас, был мтур сара фәҡәт Бөрйәндә үтергә тейеш.
Бөгөн сарала ҡатнашыусыларҙың да фекерҙәре лә шулай.
**-Был конкурстың географияһы киңәйә бара тип әйтә алаһығыҙмы?**
-Конкурс географияһы киңәйә. 2014 йылда үткән конкурстан һуң балаларҙың иң-индәрен йыйыу маҡсатынан, муниципаль, зона турҙарын үткәндән һуң, 1-3 урын яулаусыларҙы республика кимәленә сығарыу дөрөҫтөр , тип уйлайым.
**-Республика кимәлендәге еңеүсегә хөкүмәт тарафынан ниндәй дәртләндереү сараһы ҡаралған?**
-Был конкурс саф башҡорт телендә үтә. Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлығы һәм ЮНЕСКО проекты буйынса Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индерелгән "Урал батыр" эпосын өйрәнеү һәм популярлаштырыу, башҡорт халҡының иң яҡшы ижад өлгөләрен һаҡлау һәм таратыу маҡсатында төрлө телдәрҙә лә сығыш яһайҙар, әммә Рәсәй кимәлендә үткәрелмәй.
Ә дәртләндереүгә килгәндә, еңеүсегә Рәсәйҙең "Мәғариф " өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендә, һәләтле балаларҙы үҫтереү маҡсатында Рәсәй Президентының 30 мең һумлыҡ Гранты, ә еңеүсене әҙерләгән уҡытыусыға Республика Башлығының бүләге тапшырыла.
**-Ә быйылғы конкурсты ойоштороу кимәле тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?**
-Ойоштороу кимәле юғары. Был бер көнлөк кенә эш түгел. Бөрйәндәрҙең берҙәмлеге,ойошҡанлығы,сараны үткәреүгә күп көс һалғанлыҡтары,конкурс менән ҡыҙыҡһынған кешеләрҙе йәлеп итә белеүҙәре маҡтауға лайыҡ. Сара йыл темаһына тәрбиәүи саралар менән байытылған. Кино йылына арнап,"Урал батыр" эпосы буйынса диск сығарылды.
Был әһәмиәтле сараны юғары кимәлдә ойоштороуҙа район хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы Шәриповтың роле баһалап бөткөһөҙ. Уға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.
**-Конкурсты үткәреүгә бағымсылар ярҙамы булдымы?**
-Әлбиттә. Яҡташтарыбыҙ, яуаплылығы сикләнгән "Уфагидромаш" йәмғиәтенән Фәниә һәм Әнүәр Йәнбирҙиндар 3-сө йыл рәттән был конкурсҡа бағымсылыҡ ярҙамы күрһәтәләр. Уларҙан тыш, "Крекс" турфирма генераль директоры Сергей Витальевич Колесников,"Ағиҙел" художество берекмәһе етәксеһе, БР Дәүләт Королтайы депутаты Зөһрә Салауат ҡыҙы Исмәғилева, райондаштарыбыҙ БДУ-ның башҡорт әҙәбиәте, фольклор һәм мәҙәниәт кафедраһы профессоры, филология фәндәре докторы Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы Шәрипова, эшҡыуарҙар Зилә Хәләф ҡыҙы Насретдинова, Гөлфиә Ғарифулла ҡыҙы Ҡолбирҙиналарҙың да ярҙамы ҙур булды.
Республиканың киләсәк быуынына битараф булмағандары өсөн, уларға ҙур рәхмәт белдерәм.
Алдағы көндәренә уңыштар, ғаилә бәхете һәм ҡыуаныслы тормош теләйем.




Учалы районы командаһы етәксеһе Гөлдәр Арыҫланғәле ҡыҙы Хәкимова:
Үҙем етәкселек иткән "Бөҙрәкәй "театрының емештәре беҙҙе Бөрйән тарафтарына бәйгегә илтте. Эпосты яттан һөйләүсе уҡыусым Ләйсән Золотарева иҫ китмәле матур сығыш яһап, барыһын хайран итте.Ғаиләһендә лә "Урал батыр "эпосын өйрәнеүгә мөкиббән киткәндәр. Бәйгегә атаһының килеүе ҡыуанyсыслы хәл. Ләйсән думбырала, ике төрлө ҡумыҙҙа,ҡурайҙа уйнай ,кош тауыштары ла сығара белә.Ҡыҙ матур итеп бейей ҙә,йырлай ҙа.
Ләйсән Золоторева:
-Был бәйгелә алты йәшемдә эпостың 3500 юлын ятлап, конкурстан тыш ҡатнаштым. Республика телевизион "Байыҡ" бейеүселәр бәйгеһендә "Һыбайлылар" бейеүе менән икенсе урын яуланым.

Рәүилә Рәшит ҡыҙы Йортбағышева, Бөрйән районы мәғариф бүлеге методисы, республика һәм район кураторҙары етәксеһе:
-Быйылғы конкурсҡа мәктәп етәкселәре менән әҙерлекте ойошҡан рәүештә алдан башлап ебәрҙек. Иң беренсе районда кураторҙар һәм вожатыйҙар исемлеге булдырылды. Бар кураторҙар һәм вожатыйҙар үҙ эштәренә оло яуаплылыҡ менән ҡаранылар.Сара барышында өс көн буйы конкурсанттарҙың һаулығы, ғүмере, йәшәйеше һағында улар уяу торҙолар. Уларға һәм мәктәп етәкселәренә ошо эште яҡшы ойошторғандары өсөн оло рәхмәтемде белдерәм.Ә барлыҡ ҡунаҡтарға иҫән-һау ҡайтып етеүҙәрен һәм алдағы йылдарҙа ла ошо мәртәбәле конкурста ҡатнашыуҙарын теләйем.



Йәш сәсәндәр арбай йөрәктәрҙе...





Асылына ҡайтты “Урал батыр “ –
Тереһыуҙар булып ағылды.
Эй, халҡымдың теле – үҙе бер им –
Ергә бәрәкәттәй яғылды.

***Һүҙ – баһалама ағзаларына***

**-Урал батырҙың тулы образын бөгөнгө сәхнәлә күрә алдығыҙмы?**

Жюри рәйесе – Рәсәй Гуманитар Фәндәр академияһы академигы, филология фәндәре докторы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте ,фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты
Ә. М. Сөләймәнов:

*-Бер яҡтан уйлаһаң, ундай маҡсат ҡуйылмаған. Бында беҙ төрлө образдарҙы күрәбеҙ. Ҡайһы бер командаларҙа күберәк өстөнлөк Һомай образына иҙке тәбиғәткә бирелә. Миңә балаларҙың үҙҙәрен сәхнәлә тотоуы, декорация, костюмдарҙы тап килтереп әҙерләүҙәре оҡшаны. Әле ҡараған сығыштарҙан Учалы, Салауат, Баймаҡ, Стәрлетамаҡ районлары был йәһәттән айырылып торҙо.*

**-Бөгөнгө конкурсанттарҙың сәсәнлек оҫталығын нисек баһалайһығыҙ?**

Жюри ағзаһы, филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры, БР-ҙың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, яҙыусы, Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премия лауреаты М.Х. Иҙелбаев:

*-Эпосты башҡарғанда сәсәнлек оҫталығы ла, актерлыҡ оҫталығы ла кәрәк Бөгөнгө тамаша, әлбиттә, хайран ҡалдыра. Балаларҙың актерлыҡ оҫталығы юғары. Ә сәсәнлек оҫталығына килгәндә, ул тәңгәлдә әле эшләргә кәрәк. Мәшһүр эпосыбыҙҙы үҙе лә сәсән булған Мөхәммәтша Буранғолов Хәмит һәм Ғәбит сәсәндәрҙән яҙып алған саҡта уларҙың башҡарыу оҫталығына таң ҡалған. Хәмит сәсә,эпосты башҡарған саҡта, илаған ерҙә –илап, көлгән ерҙә көлөп башҡарған. Мөхәммәтша Буранғолов хатта уға үҙе менен килгән атын бүләк итеп китә. Бына ҡайҙа ул һүҙ көсө! Киләсәктә Хәмит сәсән кеүек башҡарыу оҫталығына эйә булған, бай Ф рухлы Урал батыр вариҫтарын күрге килә.*

**-Һеҙгә иң оҡшаған сығышты атап китһәгеҙ ине.**

“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналы баш мөхәррире,Рәсәй Федерацияһының маҡтаулы мәғариф хеҙмәткәре С.Ғ. Кәримов:

*-Был һорауға аныҡ ҡына яуап бирә алмайым, сөнки кемдер һөйләү менән алдыра, кемдер артистизм менән таң ҡалдыра.Тик шуны әйткем килә: был бәйге ирекле булһа, кем теләй,шул килеп, һәләтен күрһәтер ине.Сөнки 1-се тур зоналарҙа үтә. Унда 7-8 командан 2-3 команда ғына һайлап алына.Шунлыҡтан күп уҡыусылар ҡатнашыуҙан мәхрүм ҡала. Юҡһа һуңғы йылдарҙа “Урал батыр” конкурсы профессиональ конкурсҡа әйләнеп бара. Был конкурста бөтә теләүселәр ҙә ҡатнашһын ине тигән теләгем бар.*

**-Быйылғы конкурсты, элеккеләре менән сағыштырып, нимә әйтә алаһығыҙ?**

Педагогия фәндәре кандидаты, дәреслектәр авторы В.И. Хажин:

*-Иҫ киткес ғәжәп конкурс! Сөнки,беренсенән, балалар үлемһеҙ ҡомартҡыбыҙҙы уҡыйҙар, уларҙа эпосты ятлау теләге тыуа.”Урал батыр” эпосы - әле асылмаған серҙәр хазинаһы.Ул-халыҡ аңы тыуҙырған эпос. Ул- иң күренекле мәҙәни берәмегебеҙ.Милли идея- “Урал батыр“ эпосын белеү.Эпостың бер урынында ла башҡорт тигән һүҙ юк .Ә бына ҡурай тураһында әйтелә.Ошонан шуны әйтергә була: башҡорт һүҙе ике мең йылдар элек килеп ингән һүҙ.Ә “Урал батыр” эпосының ижад ителеүенә дүрт-ун мең йылдар тирәһе. Ҡурай шул ваҡытта уҡ билдәле булған.Ул - беҙҙең моң, психология, тормошҡа ҡарашыбыҙ, донъяны аңлауыбыҙ. Йәшәү нигеҙен тәьмин итеүсе мәҙәниәт - ул “Урал батыр”эпосы.Уның булыуы менән беҙ- бәхетле халыҡ.Ер шарында йәшәгән халыҡтарҙың бер нисә тиҫтәһенең генә эпостары бар. Ә беҙҙең эпосыбыҙ иң боронғоларҙан һанала.Эпосты өйрәнеү,өйрәтеү ҙур әһәмиәткә эйә. Быйылғы бәйгегә 28 команда килгән.Был йөҙҙән ашыу бала ҡатнашты тигән һүҙ.Эпосты башҡарыусыларҙың географияһы ла киңәйә. 8 бала 100% менән эпосты тулыһынса ятлаған. Киләсәктә был конкурс, республикабыҙҙың ҡайһы ғына төбәгендә үтһә лә, йәш сәсәндәрҙе үҙенә күберәк туплаһын ине.*

**-“Урал батыр” эпосын сәхнәләштереү йылдан-йыл камиллаша бара тип әйтә алаһығыҙмы? Сәхнәләштереүҙә артыҡлыҡ күҙгә ташлана, йәғни халыҡ ижады жанрҙарын берләштереү бара. Уға нисек ҡарайһығыҙ?**

Тарих,тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, фольклористика бүлеге мөдире Г.Р. Хөсәйенова:

-Балаларҙың сығыштары, әлбиттә, оҡшаны.Ғалимә булараҡ,шуны әйтер инем: әҫәр нисек бар, шулай күрһәтелергә тейеш, хатта өтөрө, нөктәһе үҙгәрергә тейеш түгел. Мәҫәлән, халыҡ йырҙарын эпос менән ҡушып ебәреү оҡшап етмәне. Мөхәммәтша Буранғолов әҫәрҙе нисек яҙып алған, шулай булырға тейеш. Эпосты аңлап, уның эсенә инеп һөйләргә кәрәк. Ҡырғыҙ, монгол халыҡтары үҙҙәренең эпостарын нисек бар, шулай башҡаралар. Уларҙа борон-борондан эпосты һөйләү ҡағиҙәләре һаҡланған. Ә беҙҙә ул юғалған.Шуға ла сығыштар ҙа төрлөсә: берәүҙәр ҡысҡырып, икенселәр тыныс тауыш менән, һирәк кенәләр эпос эсенә инеп китеп һөйләй. Тасуирлы һөйләү етмәй. Бында өйрәткән уҡытыусыларҙы ла, балаларҙы ла ғәйепләп булмай. Эпосты һөйләү буйынса беҙҙә борондан һаҡланып килгән өлгө юҡ. Киләсәктә ошоно тергеҙеү бурысы тора. Ә сәхнәләштереүгә килгәндә, инде ғалим-аҡһаҡалыбыҙ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы импровизацияның булыуына ҡаршы түгел. Беҙ рухи ҡомартҡыбыҙ ”Урал батыр” эпосын быуындан-быуынға тапшырырға, рухи байлығыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу бурыслыбыҙ.

**-Зәкиә Ғәлимйән ҡыҙы, һеҙ жюри составында тәүге тапҡыр.Ниндәй тәьсораттар кисерәһегеҙ?**

Жюри ағзаһы, филология фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы доценты З.Ғ.Мырҙағолова:

*-Миңә Бөрйән ерендә үткәрелгән “Урал батыр” эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһе бик яҡшы тәьсораттар ҡалдырҙы. Республиканың төрлө районларынан бик әҙерлекле командалар килгән. Был бәйгенең һәләтле балаларҙы асыуҙа, уларҙы үҫтереүҙә әһәмиәте ғәйәт ҙур. Конкурсҡа әҙерлек барышында мәктәп уҡыусылары матур һөйләү сәнғәтен, театр нескәлектәрен үҙләштерергә тырыша. Был иһә уларҙы әҙерләүсе уҡытыусыларҙың да үҙ өҫтәрендә өҙлөкһөҙ эшләүҙәрен талап итә. Конкурстың маҡсаттары ҙур, тәрән. Халҡыбыҙҙың мәшһүр эпосы “Урал батыр” әҫәре нигеҙендә ятҡан гуманистик идеяларҙы асып биреүгә, халыҡҡа, йәш быуынға еткереүгә йүнәлтелгәнлеге бәйгенең ҡиммәтен күрһәтә. Конкурсҡа килгән балаларҙың да ошо изге ниәттәрҙе аңлап, сәхнәгә сығыуы, ролдәрен ихлас башҡарыуҙары ҡыуандырҙы.*

Мөхәрририәт: Истәкова Р.Ә., Сәйәхова С.Ғ., Мөләкова З.Р.
Версткалаусылар: Дәүләтбирҙина Д.Р., Бикмәтова Н.Й.